Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы муниципаль район
Яҡшымбәт ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Ғәзиз Әлмөхәмәтов- мәшһүр  композитор.

Башҡарыусы: Әбдерәхимова Ләйсән,
8-се класс уҡыусыһы.
Етәксеһе: Айҙарова Рузалия Әхмәҙи ҡыҙы,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Йөкмәткеһе.

1. Инеш.
2. Төп өлөш. Моң даръяһы.
3. Йомғаҡлау.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов- мәшһүр  композитор.

Инеш

Һәр кеше күңелендә ниндәйҙер моң йәшәй. Шул моң күңеле бай кешелә – композиторҙа ноталарға һалынған музыкаға әйләнә. Музыканың хәсиәте кешеләрҙең күңел ҡылдарын сиртеп, үҙенсә моңландырыр һәм хыялландырыр яңы моңдар, уй- тойғолар уята. Бәләкәйҙән халыҡ моңон, әсәһенең йырҙарын тыңлап үҫкән Ғәзиз Әлмөхәмотовтың моң даръяһының башы тыуған ерлегенә, тыуған тупрағына барып тоташа. Дарьялар шишмәләрҙән, инештәрҙән башлана.

Тикшеренеү эшемдең маҡсаты- Башҡортостандың тәүге композиторы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеү.

Халҡыбыҙҙың мәшһүр йырсыһы, атаҡлы композитор, Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәзиз Әлмөхәмәтов 1895 йылдың 29 октябрендә  Көйөргәҙе районы Иҫке Мораптал ауылында тыуа. Бында ҡуйы урмандар ҙа, күккә олғашҡан ҡаялар ҙа юҡ. Әммә был ерҙәр үҙенең тыныс ҡына, күҙгә ташланмаған хозурлығы, алыҫ- алыҫтарға йәйелгән иркенлеге, шифалы, хуш еҫле үлән ҡаплаған ҡалҡыулыҡтары менән матур. Ғаиләлә 6 ир бала тәрбиәләнә. Балалар бәләкәйҙән эшләп үҫәләр.  13 йәшлек  Ғәзизде ағаһы Абдрахман  Үзбәкстанға алып китә. Тыуған төйәгенән айырылғас, үҫмер ҡәҙерле кешеләрен, йәндәй күргән туғандарын, йәмле Юшатыр йылғаһын, шифалы Тоҙлокүлен, Яҡут тауын һағынған. Һағыныу хистәрен моңға һалған, йырҙар йырлап күңелен баҫҡан.

Ғәзиз йәйҙәрен ағаһы менән ялланып йөҙөм баҡсаларында эшләй, ҡышын мәҙрәсәлә белем ала. Ун һигеҙ йәшенә тиклем Ғәзиз шулай  йәйҙәрен эшләп, ҡыштарын уҡып, Ташкентта йәшәй. Йыр уның тоғро юлдашына әйләнә, башҡорт йырҙары уның йәненә, йөрәгенә бер дауа була. “Малай саҡтағы яңғырауыҡлы альт көслө, сағыу һәм шул уҡ ваҡытта йомшаҡ тенорға әйләнә”, - тип билдәләй музыка белгесе Л.П.Атанова[1]

Ташкент ҡалаһында ул үҙен йырсы булараҡ һынап ҡарарға батырсылыҡ итә һәм тиҙ арала популярлыҡ яулай. Ғәзиз Әлмөхәмәтов “Шишмә” исемле татар –башҡорт йәштәр клубы ойошторған концерттарҙа  сығыш яһай. 1914 йылдан иһә 19 йәшлек йырсы егет үҙ аллы концерт эшмәкәрлеген башла. Уның  исеме тиҙҙән Урта Азияла ғына түгел, ә Себер, Ҡаҙағстан, Волга буйында киң танылыу ала, уны бер туҡтауһыҙ концерттарға саҡыралар.

[1] Атанова Л.П. Жизнь как песня: Твоческий портрет Газиза Альмухаметова. Уфа, 1973.4-се бит

Гастролдәр менән Башҡортостанға ҡайта, Татарстанға бара. Ғәзиз Әлмөхәмтов һәр бер сығышын башҡорт халыҡ йыры “Буранбайҙан” башлар булған.

## Төп өлөш. Моң даръяһы

Үзбәкстанда йәшәгәгән йылдарында үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ халыҡ моңдары менән таныша, артабан рус музыкаһын, бөйөк рус йырсыларының башҡарыу оҫталығын ихлас өйрәнә, һәр ваҡыт үҙенең белемен камиллаштырыу, ижади фекерләүен үҫтереү өҫтөндә эшләй.

20-се быуатттың баштарында Ғәзиз Әлмөхәмәтов Шәйехзада Бабич менән таныша. 1917-1918 йылдарҙа улар Өфөлә, Ырымбурҙа тамашалар ойошторалар, бергәләшеп концерттар бирә башлайҙар. Бабич яҡынлы шиғырҙарын уҡый, Әлмөхәмәтов халыҡ йырҙарын башҡара. Халыҡ яҙыусыһы Сәйфи Ҡудаш: “Әгәр ҙә Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән Бабич һәр ҡайһыһы айырым- айырым ғына кисә үткәрһә, минеңсә, улар, бына шулай бергәләшеп яһалған концерттарҙағы кеүек ҙур уңышҡа өлгәшә алмаған булырҙар ине. Сөнки талантлы йырсы менән талантлы шағир икәүләшеп концерт биргән саҡта тыңлаусыларҙың түбәләре күккә тейә. Улар бер-береһен тулыландыра, бер –береһенә үҙенең матурлығын өҫтәй. Мәҫәлән, Ғәзиздең йырынан һуң сәхнәлә бер аҙ моң болоттары ҡуйырып ҡала. Шаян тәбиғәтле Бабич сәхнәгә өйөрмә кеүек килеп сыға ла үҙенең шиғырҙары менән болоттарҙы таратып ебәрә,”- тип хәтерләй.[2]

1921 йылда Ташкентҡа гастролгә Ҡазан йырсылары, музыканттарынан торған төркөм килә. Улар араһында композитор Сәлих Сәйҙәшев, артистар Кәрим Тинчурин, Фәттәх Латипов, Рабиға Буршаева ла була. Улар талантлы Ғәзиз Әлмөхәмәтовте үҙҙәренең концерттарында сығыш яһарға саҡыралар. Һуңыраҡ Баҡы ҡалаһында сығыш яһағандан һуң, уға музыкаль комедияла ҡатнашырға тәҡдим итәләр. Йәш йырсыға танылған артистар менән йәнәш профессиональ сәхнәлә сығыш яһау ҡанат ҡуя,үҙ-үҙенә ышанысын арттыра. Тап ошо ваҡыттан алып ул башҡорт милли музыкаль театры тураһында хыяллана башлай.

Күп тә тормай, Ғәзиз Әлмөхәмәтов үҙенең тәүге ижади емеше-“Сания” операһының беренсе шаршауын яҙа. 1922 йылдың яҙында Ташкент йәштәре тарафының “Сания” сәхнәштерелә. Төп партия – Зия ролен Әлмөхәмәтов үҙе уйнай. Әлбиттә, был әҫәр әле буласаҡ операға ишара ғына булғандыр, әммә Ташкент йәштәре һәм зыялылары “Сания”ның көйҙәр шунда уҡ күтәреп ала,

---

[2] Шәйехзада Бабич тураһында иҫтәлектәр. Төҙ: Р.Бикбаев. Өфө, 1994,286-сы бит.

йырлай башлай. Музыкаль белеменең наҡыҫларын тойған Әлмөхәмәтов, дуҫтарының тәҡдиме буйынса, әҫәрен эшләп бөтөрөү ниәте менән Ҡазанға юллана. Музыкаль театр өлкәһендә эшләгән, ул заманда танылған йырҙар авторы Солтан Ғәбәши һәм тәжрибәле композитор, Мәскәү консерваторияһын тамамлаған белгес Василий Иванович Виноградовҡа мөрәжәғәт итә. Башҡорт йырсыһының ҡыйыу тәҡдимен был музыканттар ғына түгел, Татарстан республикаһының етәкселәре лә дәррәү күтәреп ала. Либретто яҙыу татар яҙыусыһы Фәтих Әмирхәнға йөкмәтелә, ижад итеү өсөн тейешле шарттар булдырыла... Ә 1925 йылдың 25 июнендә башҡорт һәм татар халыҡтарының сәнғәтен өр-яңы юғарылыҡҡа күтәреп, сәхнәгә тәүге башҡорт-татар операһы ҡуйыла.

Әҙәрҙең йөкмәткеһе һылыу ҡыҙ Сания менән ярлы егет Зияның саф мөхәббәте һәм патриархаль ҡанундарға ҡаршы күтәрелеүе, бәхет өсөн көрәшенән ғибәрәт. Сания партияһын йәш йырсы Зөһрә Байрашева, Зия- Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Староста партияһын Солтан Ғәбәши һ.б. башҡара. Премьера Ҡаҙандың Опера театрында (хәҙерге К.Тинчурин исемендәге драма һәм комедия театры) бик тантаналы рәүештә уҙа. Опера хаҡында Татарстан һәм Башҡортостандың ғына түгел, ә Рәсәй һәм хатта сит илдәрҙең ваҡытлы баҫмалары – Германия, Италия, Франция, Япония гәзиттәре бик әүҙем яҙып сыға.

Премьеранан һуң күп тә үтмәй,” Сания”ның партитураһы авторҙар һәм башҡараусыларының фотолары төшөрөлгән плакаттар Майндағы Франкфурт ҡалаһында үҙгән Халыҡ-ара күргәҙмәлә Советтар иленең ҡаҙанышарының береһе булараҡ күрһәтелә.
Тәүге уңыш яңы эҙләнеүҙәргә илһамландыра. Әлмөхәмәтов, Ғәбәши һәм Виноградовтың киләһе сәхнә әҫәренең нигеҙенә Мәжит Ғафуриҙың “Эшсе “ поэмаһы һалына. Опера либреттоһын Мәжит Ғафури үҙе яҙа. Премьера Ҡазан ҡалаһында үтә. Ижади коллективтың йөрәге, уның моң шишмәһе һәм рухи лидеры, әлбиттә Ғәзиз Әлмөхәмәтов була. “Эшсе” операһының төп геройы – Ниғмәт партияһын Ғәзиз Сәлих улы үҙе башҡарған. Әҫәр бик ҙур уңыш менән ҡуйыла, халыҡтың ихлас һөйөүен яулай.

Ижад эшен Әлмөхәмәтов бик әүҙем концерт эшмәкәрлеге менән алып бара. Йырсының исеме ул йылдарҙа бөтөн шәреҡ донъяһында киң билдәлелек яулай. Әлмөхәмәтовты яраталар, ҡайҙа ла көтөп алалалар. Ғәзиз Әлмөхәмәтов Сәмәрҡәнд ҡалаһында сығыш яһай. Зал шығырым тулы, халыҡ геү килеп алҡышлай, йырсыны ҡабат- ҡабат саҡырып сығара. Концерт тамамамланғас, касса өсөн яуаплы администраторҙың юҡҡа сығыуы

асыҡлана. Был хәлде белгән тамашасылар- студенттар, эшселәр- яңынан аҡса йыйып, йырсыға килтерә һәм аҡсаны алыуын үтенә. “Мине залдан күтәреп алып сыҡтылар... Был хәлде һис ҡасан онотмаясаҡмын, һәм эш аҡсала ла түгел. Уларҙың ихласлығы тетрәндерҙе мине”, -тип хәтерләр булған йырсы. Ә ҡайтыр юлға йыйынғас, бик күмәк халыҡ вокзалға килеп, уны оҙатып ҡала. Ғәзиз Әлмөхәмәтов репертуарында төп урынды башҡорт халыҡ йырҙары тора. Ул шулай уҡ “Сания” операһынан Зыя арияһын, Хәбибулла Ғәбитовтың “Ынйыҡай менән Юлдыҡай”драмаһына яҙылған йырҙарын, үҙе яҙған “ Шомло ел”, “Сайҡалалар кәмәләр”, “Ағиҙел ярында”, “Йырҙар яҙам”, “Көтөүсе”, “Эшсе” операһынан Ниғмәт арияһын ҙур дәрт, илһам, оҫталыҡ менән башҡара.
Башҡортостанда профессиональ музыка сәнғәтен үҫтереү хыялы менән йәшәгән Әлмөхәмәтов тыуған республиканың 10 йыллығына арнап, симфоник оркестр өсөн  тантаналы “Башҡортостан марш”ын  ижад итә. Шул уҡ йылдарҙа    В. Виноградов менән берлектә башҡорт халыҡ көйҙәренән торған “Халыҡ йырҙары” йыйынтығын нәшриәткә әҙерләй. Йыйынтыҡҡа артистың үҙе яратып башҡарған “Зөлхизә”, “Ҡаһым түрә”, “Ҡолой кантон”, “Сибай кантон”, “Таштуғай” йырҙары тупланған.
1929 йылда Башҡортостан  Республикаһының Хөкүмәте Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа Өфөгә ҡайтырға тәҡдим итә. Шул уҡ йылда республикала беренсе булып “Халыҡ артисы” тигән маҡтаулы исем бирелә. Коипозитор тормошоноң  был осоро тотош ижади эштән, башҡорт мәҙәниәтен төҙөүгә йүнәлтелгән эҙләнеүҙәрҙә тора. 1931 йылдың авгусында “Башҡортостан “ гәзитендә “Башҡорт йырсыһы Ғәзиз Әлмөхәмәтов Башҡортостанға ҡайтты” тигән исем аҫтында күләмле интервью баҫылып сыға. Унда Ғәзиз Сәлих улы үҙенең киләсәккә ҡорған ижади пландары, Мәскәүҙән, Ҡаҙандан юғары белемле музыканттар, композиторҙарҙы саҡырырға кәрәклеге, профессиональ сәнғәтте үҫтереү хаҡында һөйләй. “Был эшкә республикабыҙҙың бар йәмәғәтселеге тотонорға тейеш”,-ти ул. Һәм был йәһәттән Ғәзиз сәлих улы үҙен эҙмә-эҙлекле,ныҡышмалы ойоштороусы итеп таныта. Бәләкәй генә концерт төркөмөн туплап,йөк машинаһына пианино тейәп, айҙар буйына республика буйлап гастролдәрҙә йөрөй.

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тәҡдиме менән 1932 йылда Мәскәү консерваторияһында башҡорт студияһы асыла. Милли музыкаль кадрҙар тәрбиәләү эшен баштан алып аҙағынаса үҙе атҡара ул : районлар буйлап йөрөп, йөҙәрләгән кешене тыңлай, буласаҡ йырсыларҙы һайлап, Мәскәүгә алып бара һәм артабан студияның етәксеһе вазифаһын үтәй. Төрлө йылдарҙа студияны тамамлаусылар араһында – Баныу  Вәлиева, Хәбир Ғәлимов,

Ғабдрахман Хәбибуллин, Әсмә Шайморатова, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Зәйтүнә Илбаева, композиторҙар Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Рафиҡ Сәлмәнов, Рәүеф Мортазин һ.б. Бөгөн был исемдәр башҡорт сәнғәтенең үҙәген, уның алтын осорон тәшкил иткән быуын булып ҡабул ителә. Башҡортостан тәжрибәһенә таянып, тиҙҙән Татарстан һәм Урта Азия республикалары ла Мәскәү консерваторияһы эргәһендә студиялар аса һәм белгестәр әҙерләү эшенә тотона. Был башланғыстың милли кадҙар әҙерләү өлкәһендә иң ундырышлы юл булыуын ваҡыт иҫбатлай. 1933 йылда Башҡортостан дәүләт нәшриәте Әлмөхәмәтовтың “Башҡорт совет музыкаһын тыуҙырыу өсөн көрәш юлында” тип исемләнгән брошюраһын баҫып сығара. Был китап Башҡорт республикаһының профессиональ сәнғәтенең тәүге аҙымдарын сағылдырған документ буларак әһәмиәтле. Икенсенән, авторының милли сәнғәт яҙмышына ҡағылышлы фекерҙәрен туплап, Ғ.Әлмөхәмәтовтың  эшмәкәрлегенең киңлегенә, ҡараштарының, фекерҙәренең тәрәнлегенә инанырға мөмкинлек бирә.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрын төҙөп, милли опера сәнғәтен булдырыу идеяһы Ғәзиз Сәлих улының иң ҙур хыялына әүерелә. Әлегәсә Башҡортостанда профессиональ музыка сәнғәтенең бөтөнләй булмауын иҫәпкә алғанда, был идеяны ҡола яланда мәрмәр менән гәлсәрҙән торған гүзәл һарай һалыу менән сағыштырып булыр ине. Әммә күптәргә көс етмәҫтәй, бойомға ашмаҫтай уйҙырма булып күренгән был хыялын тормошҡа ашырыр өсөн “тауҙар ватып, таштар аҡтарыр” көс тә, таһыллыҡ та, тәүәкәллек тә тапҡан. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хыялының тормошҡа ашыуын үҙ күҙҙәре менән күрергә насип булмай. Яҙмышының  ҡот осҡос шаяртыуы булғандыр - опера театры асылыуға һанаулы ғына ваҡыт ҡалғас, Ғәзиз Сәлих улының ғүмере өҙөлә...

Уны ҡара машина алып киткән саҡта – Рауза Әлмөхәмәтоваға ни бары 13 йәш кенә була. Рауза Ғәзиз ҡыҙы атаһы тураһында бик күп иҫтәлектәр һаҡлай.” Үҙемде белә башлағандан алып, гел атайым менән бергә булыуым хәтеремдә. Мине хатта “Ғәзиздең ҡойроғо тип атай инеләр.Әсәйем партия эшендә ине көнө-төнө. Ясли, балалар баҡсаһынан мине атайым алып ҡайта...Өфөгә күсеп килгән осорҙо яҡшыраҡ хәтерләйем, миңә 7 йәш тулғайны инде. Иҫемдә, Луначарский баҡсаһында йыш ҡына концерттар ойоштороla ине, атайым мине үҙе менән алып бара ла залда тыңлап ултырам. Уны тамашасылар ҡабат- ҡабат сәхнәгә сығып йырлауын һорап алҡышлай торғайнылар. Ә мин уны йәлләйем: “Атайым былай ҙа арый, уны ҡабат-ҡабат йырлаталар,”- тип. Атайым консерватория эштәре менән мәшғүл булғанда мине 1йылға яҡын үҙе менән Мәскәүгә алып китте, мин унда

мәктәптә уҡыным, башҡа студенттарҙың балалары менән консерватория буйлап йүгерешә инек...

Берәй эш боҙһам, урамда малайҙар менән һуғышһам, атайым алдына ултыртып ала ла, ипләп кенә улай ярамағанлығын аңлата. Һис ҡасан берәйһенә ҡысҡырғанын ишетмәнем. Уның менән оҙаҡ –оҙаҡ итеп төрлө нәмәләр хаҡында һөйләшә инек. Минең менән тик башҡортса ғына һөйләште.

1937 йылда пароходта ултырып икәүләп Мәскәүгә барҙыҡ. Ул заманда пароходтар бик яй йөрөй ине. 20 көнләп барғанбыҙҙыр.Атайым юл буйына ауылы тураһында, ата-әсәһе, ағайҙары, дуҫтары тураһында хәтирәләргә бирелгәне иҫемдә. Үҙенең пландары, эшләгән эштәре, музыка хаҡында мауығып һөйләне. Әллә тиҙҙән айырылыуыбыҙҙы һиҙгән...

Аҙағыраҡ әсәйем һөйләүенән беләм, Мәжит ағайҙар бер көндө ҡунаҡ саҡырырға булалар. Уларға Мәжит ағайҙы дауалаған табиптар, күренекле кешеләр, профессорҙар йыйыла, әсәйем менән атайым да бара. Бер саҡ Мәжит ағай: “Мәстүрә, һин ҡунактар менән бул, ә һин Ғәзиз, рояль янына ултыр, йырла,”- ти. Атайым әйтә: “Мәжит ағай, барыһы ла рустар бит...” Яҙыусы былай тип яуаплай:”Беҙҙең йырҙарыбыҙҙы, көйҙәребеҙҙе белһендәр, йырла.” Атайым башҡорт халыҡ йырҙарын йырлағас, ҡунаҡтар шул хәтлем яратып ҡабул итә, ҡат –ҡат һорап йырлаталар. Ә инде Чайковскийҙың “Евгений Онегин” операһын Ленский арияһын йырлауы уларҙы шаҡ ҡатыра...

Атайымды ҡулға алған төндө бик яҡшы хәтерләйем. Мин йоҡлай инем, атайым килеп уятты. Таныш түгел хәрбиҙәр өйөбөҙҙөң аҫтын – өҫкә килтереп, нимәлер эҙләй, ноталарын, китаптарын аҡтара. Атайым “Сәсән”журналы яҙҙыра ине. Уларҙың биттәре араһынан да эҙләнделәр, йыртҡылап бөттөләр, хатта минең мендәремде, түшәгемде йыртып эҙләнеләр. Декабрь айы ине, иҙәнгә сәселгән нота ҡағыҙҙарында бысраҡ итектәренең эҙҙәре ҡалды. Атайым Ташкент ҡалаһына гастролгә китергә йыйына ине, сумаҙанын да тултырып ҡуйғайны. Ҡурҡыныс төн булды ул, ғүмерлеккә хәтеремә уйылып ҡалды. Өс айҙан әсәйемде лә ултырттылар. Төрмәлә 6 ай ултырып, бик насар хәлдә, баштан – аяҡ ауырыуға һабышып сыҡты ул, һәм бер ҡасан да унда күргән – кисергәндәрен һөйләмәне.
... Атайымды тағы ла бер тапҡыр күреп ҡалдым мин. Бер көндө беҙгә таныш түгел бер ҡатын килеп керҙе лә әсәйемә:”Шул көндө, шунса сәғәттә уны күрергә мөмкинлек бар, тик үҙең барма, ҡыҙың барһын,”- тип әйтеп сығып китте. Беҙ уның кем икәнлеген дә белмәй ҡалдыҡ. Шулай ҙа ул әйткән

урынға- Сазонов урамындағы НКВД урынлашҡан йорт ҡаршыһына Д.Юлтыйҙың ҡыҙы менән бергә барып торҙоҡ. Бер ваҡыт оло ҡапҡалар асылып китте лә унан һалдаттар атайымды, тағы бер нисә кешене алып сыҡты. Атайым пальтоһының яғаһын күтәргәйне, шулай ҙа мине күрҙе. Ҡара машинаға табан барған арала ул миңә боролоп:”Ҡыҙым, кеше бул, -тип әйтеп кенә өлгөрҙө, машинаға йәһәтләп ултыртып алып та киттеләр... Шул һуңғы осрашыуыбыҙ булды.”[3]

Йомғаҡлау

Ғәзиз Әлмөхәмәтовты милләтселектә, Зәки Вәлидиҙең Советтарға ҡаршы көрәшендә ҡатнашыуҙа, террористик эшмәкәрлектә ғәйепләйҙәр. Ете ай Өфө төрмәһендә үткәргәндән һуң, 1938 йылдың июлендә Ғәзиз Әлмөхәмәтов атып үлтерелә.
Ул ҡара көндә үлем язаһына тарттырылғандар исемлегендә Булат Ишемғолов, Мәкәрим Мәһәҙиев, Дауыт Юлтый һәм милләтебеҙҙең аҫыл улдары ла бар...

1957 йылда Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтовтың “халыҡ дошманы “ тигән мөһөрҙән аҡланып, реабилитациялана.

Милләттең милләт булараҡ өлгөргәнлеген уның бөйөк шәхестәренә ҡарата булған мөнәсәбәте билдәләй. Талант эйәһе, аҡыл эйәһе был донъяға үҙ халҡына хеҙмәт итер өсөн яратыла. Халҡы иһә уның эштәрен дауам итеп, рухына тап төшөрмәй йәшәй белһә, уны ихтирам итә, күтәрә белһә генә, үҙ-үҙен күтәрә.

Тәрәндән, ер ҡуйынан атылып килеп сығып, түңәрәк кенә күләүек яһап, кескәй йырғанағын йырып, сылтырап ағып киткән шишмә һыуы киң даръяларға барып ҡушыла. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың моң даръяһы халҡыбыҙ күңелендә һаҡлана, уның исеме моңло йыр кеүек йәшәүен дауам итә.

---

[3] М. Иҙрисова. Үҙе лә беронотолмаҫ мәңгелек моң кеүек. “Йәшлек” гәзите. 2005 йыл, 127-се һаны

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Атанова Л.П. Жизнь как песня: Твоческий портрет Газиза Альмухаметова. Уфа, 1973.4-се бит.

2.Бикбаев Р.Т. Шәйехзада Бабич тураһында иҫтәлектәр. Өфө, 1994. 286-сы бит.

3.Рәшит Шәкүр. Арҙаҡлы башҡорттар. Ғилми –биографик очерктар. Өфө, 1994.

4. М. Иҙрисова. Үҙе лә бер онотолмаҫ мәңгелек моң кеүек. “Йәшлек” гәзите. 2005 йыл, 127-се һаны